*Спартак ИЛЬЯСОВ*

# ҠАРАҒАСҠА ҠАРАП ТЕРКЕ ҮҪӘ



*Камил Вәлиев*

Зиһенгә, тойғоға эйә һәр мөьмин йән эйәһе үҙенең даирәһендә йәнәш йәшәгәнгә үрнәк. Йәмғиәттең барлыҡ ағзалары ла шәхес булып бөтмәһә лә, был шәхестәрһеҙ йәмғиәт тә булмай.

Йәмғиәт шәхестәре менән көслө. Йәмғиәт милли, сәйәси, мәҙәни, ижтимағи, әхлаҡи, дини һәм ғилми дарьяһы менән көслө. Бына шул йәмғиәттең ғилми донъяһының оло шәхесе физика-математика фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университетының дөйөм физика кафедраһы профессоры Камил Абдрахман улы Вәлиев ине.

Камил Вәлиев 1934 йылдың 23 февралендә Белорет районы Хоҙайбирҙе ауылында тыуа. Уның атаһы урман сәнәғәтендә бухгалтер, ә әсәһе Сара ҡартнәй — Рәсәй империяһын Башҡорт Республикаһын ғына түгел, ә барлыҡ милли автономиялы республикаларҙы төҙөргә мәжбүр иткән остазыбыҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең бер туған һеңлеһе. Сара ҡартнәй рухи яҡтан да көслө, саф күңелле, зиһенле, зыялы, заманының оло мөғәллимәһе ине.

Кескәй Камилдың артабанғы балалыҡ осоро Ишембай районы Маҡар ауылы менән бәйләнгән, сөнки барлыҡ нәҫел-нәсәптәре яҙмышы Ишембай районы Маҡар, Көҙән, Ғафури районы Үтәк ауылдарына барып тоташа.

Ата-әсәһе яғынан барлыҡ күренекле һәм хәлле кешеләр, ”халыҡ дошмандары” тигән мөһөр тығылып, йә оҙаҡ йылдарға һөргөнгә ебәрелеп, йә ”тройка”ларҙың ҡарары буйынса атылып бөткәс, урындағы даирәләрҙең барлыҡ үсе уларҙың әсәләренә, ҡатындарына һәм балаларына төшә. Иртә, бик иртә ”халыҡ дошмандары” балаларының әсе

яҙмышына дусар була йәш Камил. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ул апайҙарына һәм һеңле-ҡустыларына оло терәк, таяныс була.

Аслыҡ, яланғаслыҡ, етемлек уның рухи көсөн һындыра алмай. Эргәһендә изгеләрҙән дә изге оло рухи көс эйәһе — әсәһе Сара. Ул ҡурсалай. Маҡар урта мәктәбен тамамлағас, Камилға артабан уҡырға китер өсөн ҙур ауырлыҡ менән кәрәкле справкалар тупларға тура килә. Тыумыштан белем алыуға булған ынтылышы барлыҡ кәртәләрҙе еңергә көс бирә. Уҡымышлылыҡ ҡандан, нәҫелдән килә, ҙур маҡсат тыуҙыра. Ул уны Өфөләге К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтына килтерә. 1956 йылда Камил институттың физика-математика факультетын тамамлай. Артабан уҡыу теләге көслө лә бит, ләкин Ә.Вәлидиҙең нәҫеленән булыуы һәләтле егетте аспирантураға ебәреүгә кәртә ҡуя.

1956 йылдан башлап Камил Абдрахман улы Бөрйән һәм Ишембай райондарында физика уҡытыусыһы булып эшләй. Әммә артабан камиллашыу теләге оло маҡсат булып алдында тора. Шул маҡсат менән ул Башҡорт дәүләт университетының физика факультетына лаборант булып эшкә урынлаша.

Фекерләү, анализлау, һығымта яһау, иҫбатлау һәләте күренеп тора. Әммә ул саҡтағы ректорат һәм өҫкө даирәләр аспирантураға йүнәлеш-тәҡдим ҡағыҙы бирмәй. Университетты ҡалдырып, Камил Абдрахман улы Силәбе яҡтарына сығып китә. Унда ул Силәбе геология партияһына эшкә урынлаша. Бер аҙ эш күрһәткәс, Силәбе геология партияһы уға Мәскәүҙәге О.Шмидт исемендәге СССР Фәндәр академияһы эргәһендәге Ер физикаһы институтына йүнәлтмә бирә. 1966 йылда аспирантураны уңышлы тамамлаған йәш физика-математика фәндәре кандидаты Башҡортостан Фәндәр академияһының геология институтына ебәрелә. 1967 йылда ул БДУ-ның физика факультетына эшкә саҡырыла. Шунан алып ғүмеренең һуңғы сәғәтенә тиклем яҙмышы физика факультетына бәйле. Университетта Камил Вәлиев уҡытыу эше менән бергә фәнни тикшеренеү эше алып бара. Физика факультетында ғилми лаборатория ойоштора, 1985 йылда докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. Ул ғилми кадрҙар — физиктар һәм геофизиктар әҙерләүгә айырыуса күп көс һала. БДУ-ла ул ун өс йыл буйы дөйөм физика кафедраһына етәкселек итә.

Докторлыҡ диссертацияһын ғалим Мәскәү дәүләт университетының Штернберг институтында яҡлай. Уның төп фәнни тикшереү йүнәлеше — тәрән тау ҡатламдарындағы тау тоҡомдары мәтдәләренең магнит үҙенсәлеге, тау ҡатламдарының көслө температура һәм баҫым аҫтында физик үҙенсәлеге, есемдәрҙең магнит үҙенсәлеге.

Есемдәрҙең физик үҙенсәлектәрен белеү тәрән ҡатламдарҙа ҡиммәтле ер аҫты байлыҡтарының барлыҡҡа килеүен, уның өсөн шарттар тыуыуын һәм шул тирәлә ниндәй ҡыҙылмаларҙың булыу-булмауын тоҫмалларға геологтарға һәм геофизиктарға туранан-тура юл аса. Ер аҫты байлыҡтары картаһын төҙөү ҡайһы урында, нимәгә эҙләнеүҙәр

алып барырға кәрәклеген күрһәтә. Был иһә эҙләнеү эшмәкәрлегендә миллионлаған долларҙарҙы ҡаҙнала ҡалдыра.

Әйтергә кәрәк, ер физикаһы бөгөнгө көндә Рәсәйҙә тик Башҡорт дәүләт университетының физика факультетында һәм Мәскәү дәүләт университетында ғына өйрәнелә. Уларҙың икеһендә лә Камил Абдрахман улының уҡыусылары эшләй. Әгәр Мәскәү дәүләт университетында ер физикаһы ғилемен физика-математика фәндәре докторы, элекке БДУ студенты Кузьменко етәкләһә, Өфөлә физика-математика фәндәре докторҙары Роберт Әсғәт улы Яҡшыбаев һәм Салауат Сабирйән улы Әпсәләмов (хәҙер мәрхүм) алып бара. К.А.Вәлиев БДУ-ла ҡаты ер физикаһы буйынса аспирантура һәм докторантура аса. Бөгөнгө көндә уның уҡыусылары Рәсәйҙең бик күп университеттарында, ғилми-тикшеренеү үҙәктәрендә эшләй.

Остаздары иһә йөҙҙән ашыу фәнни хеҙмәт авторы. БДУ-ның физика факультетында ҡаты есемдәрҙең магнитлылығы темаһы буйынса студенттар һәм аспиранттар өсөн мәктәп аса. Уның етәкселеге аҫтында кандидатлыҡ һәм докторлыҡ диссертациялары яҙыла.

Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, профессор Камил Абдрахман улы Вәлиев киләсәк өсөн янып йәшәне. Артабанғы хыялы — Башҡортостанда физика-техник институтын асыу ине. Уны тормошҡа ашырыу өсөн, ғилми советҡа, хөкүмәт даирәләренә, үҙенең программаһын, буласаҡ институттың маҡсатын, бурыстарын, матди базаһын аңлатып, талапнамә яҙа. Үкенес, ул документ киләсәкте көтөп ята бирә. Шундай оло маҡсаттар менән янып эшләп йөрөгәндә, 2000 йылдың 12 мартында ғалимдың йөрәге тибеүҙән ҡапыл туҡтаны. Бәлки, уның исеменән был эште уҡыусылары дауам итер һәм буласаҡ физика-техник институтына профессор Камил Абдрахман улы Вәлиев исеме бирелер?

Профессорҙың ҡаты ер физикаһы белгестәре әҙерләү буйынса БДУ-ла докторантураға нигеҙ һалыуы бик ҙур ҡаҙаныш. Ул — ер ҡабығының магнитлығын, уның актив үҙгәрештәр кисереүен тикшереү буйынса Рәсәйҙә генә түгел, бөтә БДБ илдәрендәге тәүге ғалим. Камил Вәлиев Мәскәү, Ленинград, Киев, Баку һәм башҡа сит ил ҡалалары ғалимдары менән бәйләнеш булдыра, ижтимағи һәм ойоштороу эштәрендә лә ҡайнап йәшәй. Ун йылдан ашыу БДУ-ның физика факультетының профсоюз ойошмаһы менән етәкселек итә.

Күкрәге тулы моң ине, тормошҡа, халҡына, тыуған Урал тәбиғәтенә бөтмәҫ-төкәнмәҫ һөйөү, бирелгәнлек һәм тоғролоҡ һаҡлай ине йөрәге.

1965 йылдың башы. К.А.Тимирязев исемендәге Мәскәү ауыл хужалығы академияһы студентымын. Бер көндө дөйөм ятаҡтағы бүлмәмә ике егет килеп инде. Береһе күҙлекле, ҡараҡ, икенсеһе аҡ йөҙлө, алсаҡ күңелле. "Һин булаһыңмы Спартак?" — тип башҡортса өндәшеп, бик ихлас килеп күрештеләр.

Тәүгеһе Хәйбулла егете, МДУ-ның философия факультеты студенты, буласаҡ философия фәндәре кандидаты, бөгөнгө көндә БР Прези-

денты аппараты хеҙмәткәре Әмир Юлдашбаев булһа, икенсеһе Маҡарҙан, Штернберг исемендәге Мәскәү Ер физикаһы институты аспиранты Камил Вәлиев ине. Әйтерһең дә бик күптәнге таныштар-дуҫтар кеүек булдыҡ та ҡуйҙыҡ. Оҙаҡ һөйләштек. Башлыса уҡыу тураһында түгел, ә Башҡортостан, башҡорт халҡы, башҡорт рухы тураһында. Мәскәү ҡалаһының 87 юғары һәм махсус уҡыу йорттарында белем алған Башҡортостан егеттәрен һәм ҡыҙҙарын бергә йыйып, ерҙәшлек берекмәһен тергеҙергә ҡарар иттек. Сәләм, хат аша табып, үҙ-ара бәйләнештәр булдырҙыҡ. Оҙаҡламай Мәскәүҙә уҡыған Башҡортостан студенттарының дөйөм ҡоролтайын йыйҙыҡ. Был сараға Рәсәй Федерацияһы Юғары Советының клубын алып тороуға өлгәштек. Йыйында идаралыҡ, уның ағзаларын һәм рәйесен һайланыҡ. Эш планы ҡабул иттек. Миңә ерҙәшлек идаралығының рәйесе вазифаһын йөкмәттеләр. Рәйеслекте беҙ Камил Абдрахман улына бирергә булһаҡ та, ул идаралыҡ ағзаларына: ”Миңә ул эште етәкләргә ярамай, ҙур ауырлыҡтар тыуасаҡ”, — тип бик етди аңлатты. Мәсьәләнең сәйәси нигеҙле икәнен, тәрән итеп һөйләмәһә лә, төшөндөк тә ҡуйҙыҡ. Шулай, аҙ һүҙ менән эштең асылын аңлата белә торған зыялы кеше ине ул. Һәр байрам, Башҡортостанға ҡағылған һәр ваҡиғаға арнап дөйөм ҡоролтайға йә кисәгә йыйыла инек. Кисәнең рәсми өлөшөнән һуң концерт була торғайны. Гнесиндар исемендәге музыка-педагогия институтында ул ваҡыттарҙа Рима Мусина, Нажия Аллаярова, Ғәлиә Солтанова, Зөлфирә Фәрхетдинова, Зәки Мәхмүтов, Мәжит Алкиндар уҡыны. Башҡортостандан яҙыусылар, шағирҙар, концерт менән филармония, Ф.Ғәскәров исемендәге бейеү ансамбле, М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры килһенме — беҙ һәр саҡ уларҙың концерттарына күмәкләп йөрөнөк һәм осрашыу кисәләре ойоштorҙоҡ.

Партияның XX съезына Башҡортостандан абруйлы делегаттар һайланғайны. Студенттар янына Башҡортостан Юғары Советы Президиумы рәйесе Фәйзрахман Зәғәфүранов, Заһир Исмәғилев, Таһир Күсимов, Мостай Кәрим һәм башҡалар килде.

Камил Абдрахман улы, алдан килешеүебеҙ буйынса, сығышында атаәсәһеҙ, ғәрип, күп балалы ғаиләнән сыҡҡан, балалар йортонан килеүсе студенттарға Зәғәфүрановтан матди ярҙам һораны. Ул ваҡытта вуз тамамлаған студенттарҙы эшкә бөтә СССР буйлап тәғәйенләп ебәрәләр ине. Мин, үҙ нәүбәтемдә, Башҡортостан студенттарын үҙ республикаларына ҡайтарыу мәсьәләһен ҡуҙғаттым.

Зәғәфүранов был үтенестәребеҙҙе ҡәнәғәтләндерҙе. Артабан йылына ике тапҡыр Мәскәү студенттарының ярҙамға мохтаждарына матди ярҙам күрһәтелде. Ул аҡсаларҙы ерҙәшлек идаралығы алып тарата ине. Беҙҙән һуңғы осорҙа был мәсьәләләр нисек торғандыр, белмәйем. Әммә ситтә уҡыған студенттарҙы берләштереүҙә, матди ярҙам юллауҙа, уларҙы республикаға эшкә ҡайтарыу, арҙаҡлы кешеләр менән осрашыуҙар ойоштороуҙа, 23 март — Башҡортостан көнөн үткәреү

булһынмы, бында Камил Абдрахман улы менән Әмир Мырҙағәли улы әүҙем ҡатнашты.

Бабаһы Әхмәтзәки Вәлидиҙең 100 йыллығын билдәләгәндә дуҫым мине ҡунаҡҡа саҡырҙы. Ул оло йыйында Ә.Вәлидиҙең улы Сүбәдәй һәм ҡыҙы Иҫәнбикә менән осрашып, бер табында ултырырға тура килде. Олатаһы нигеҙен, мәсетен, шишмәһен ҡарағандан һуң мулланың доға уҡығаны һәм халыҡтың илашҡаны әле лә күңелемдә. Иҫ китмәле тетрәндергес күренеш булды. Ә Вәлидиҙең улы менән ҡыҙы тәүләп аталарының нигеҙенә баш эйҙе, тупраҡ алды. Күҙҙәре тулы йәш ине...

1995 йылдың июнь башында Бөтә донъя башҡорттарының 1 ҡоролтайы үткәрелде. Миңә Учалы районынан вәкил булып һайланып, унда ҡатнашырға, пленар ултырыштарҙа сығыш яһарға насип булды. Ҡоролтайҙан һуң эш буйынса Төркиәгә, Истанбул ҡалаһына осорға кәрәк ине. Төркиәнән Иҫәнбикә Туған менән Сүбәдәй ҙә килгәндәр, ағалары Камил Абдрахман улы ла — Ҡоролтай делегаты. Камил беҙҙе Өфө — Истанбул самолетына тиклем оҙатты. Ҡосаҡлашып, илашып хушлаштылар. Самолетка керер саҡта Камил миңә бер бәләкәй янсыҡ бирҙе. ”Көҙәндән, йорт нигеҙенән тупраҡ, бабайымдың ҡәберенә һалып ҡайт”, — тине. Истанбулда Ә.Вәлидиҙең ерләнгәнен белгәс, мин дә Учалы еренән кескәй янсыҡҡа тупраҡ алған инем. Самолетта Иҫәнбикә менән йәнәш ултырҙыҡ. Ул турала мин ”Башҡортостан” гәзитенең 1996 йылғы 138—140-сы һандарында ”Сәйәсәткә сәйәхәт” исемле мәҡәләмдә бик ентекләп яҙғайным.

Иманым камил! Дуҫымдың һәм үҙемдең теләгемде тормошҡа ашырып, Ҡаража — Әхмәт ҡәберлегендә остазыбыҙ ҡәбере өҫтөндә намаҙ сығарҙым, хәйер бирҙем, Ишембай һәм Учалы тупрағын ҡәбер өҫтөнә һалдым.

Камил Абдрахман улы Вәлиевтың вафатын ”Башҡортостан” гәзитенән уҡып белдем. Иланым. Уның турала тик йылы хәтирәләмен. Бигерәк тә Рәми Ғарипов, Рауил Бикбаев менән йәй көнө беҙгә, Комсомольск ҡасабаһына, килеүҙәре, ҡырҙа бесәнселәр, мәктәптәрҙә уҡытыусылар, балалар менән осрашыуҙар, Урал ҡаяларына менеүҙәр, Әүеш күлендә һыу инеүҙәр бик тә күңелемә уйылып ҡалған. Ул көндәрҙең яҡты иҫтәлеге булып төшкән фотолар әле лә һаҡлана.

Камил Абдрахман улының вафатынан һуң Иҫәнбикә Туғандың уның бер туған һеңлеһе Нурияға яҙған хаты менән танышайыҡ:

*Һөйөклө Нурия!*

*Сүбәдәйҙән Камилдың вафаты хакында хәбәр алдым. Һеҙгә күп тапкырҙар телефондан шылтыратырға маташтым, әллә телефон номерығыҙ үҙгәрҙеме? Камил ауырынымы? Әллә капыл үлдеме? Ҡайғығыҙҙы уртаклашам. Беҙҙе һеҙҙең менән табыштырған да Камил булғайны. 1989 йылда ул миңә Америкаға хат яҙҙы. Һуңынан 1990 йылда Мәскәүгә үк килеп каршыланы. Юл буйына һөйләштек. Шулай итеп, уның ярҙамында һеҙҙең менән табышыуыбыҙға ун йыл була. Ошо ун йыл эсендә шул кәҙәр күп кеше*

*үлде. Барыһының да ауыр тупрағы еңел булһын... Миндә Гүзәлдең, Юлдаштың, Илнурҙың да телефондары, адрестары юк. Уларға ла ҡайғыларын уртаклашыуымды әйтерһең. Сүбәдәй менән һиңә, Мәғәфүргә, Айгөлгә һәм башка балаларға күп сәләмдәр ебәрәбеҙ һәм ҡайғығыҙҙы уртаклашабыҙ.*

*Иҫәнбикә Туған.*

Камил ағай кеше менән аралашыуҙа бик асыҡ, ябай, һүҙгә һүҙҙе оҫта ялғаусы фекер эйәһе лә, иҫ киткес моңло тауышлы йырсы ла ине. Башҡорт халыҡ йыры иҫ китмәле киң, моңло, аһәңле, тойғоло. Йырҙар ҙа кешеләр кеүек. Тыуалар, үләләр, ә ҡайһы берәүҙәре үлемһеҙгә әйләнә. Йырҙар тарих һаҡлай, кешеләрҙе рухлы итә, маҡсат тыуҙыра, ижтимағи осорға, шәхестәргә үҙ мөнәсәбәтен әйтә.

Йылтыр ҙа ғына йылтыр ҡуҙҙар ята,
Юлаусынан ҡалған бер күмер.
Ашап-эсеүҙәре мотлаҡ түгел,
Йырлап ултырыуҙар бер ғүмер.
Мәсет манараһы юғары,
Һинең кеүек дуҫым юҡ әле...
Ырғый-һикерә килә күк бүртә
Китһен беҙҙең дуҫлыҡ күп йылға.

Бик моңло итеп йырлар ине ғалим. Ултыра биргәс тағы ла:

Шәшке бүркем икәү булһа, дуҫкайым,
Шәшке бүркем икәү булһа, дуҫкайым,
Береһен йәлләмәҫ инем.
Аттар кермәй йылғаға,
Аттар кермәй йылғаға,
Йылға алҡын булғанға...

Был ике йырҙың моңдары башҡа, икеһе лә оҙон йыр. Башҡорт йырын еренә еткереп тик башҡорт ҡына йырлайҙыр ул! Радиола был йырҙарҙың яҙмалары бар. Әммә бөгөнгө йырсылар уны башҡасараҡ, аһәңһеҙерәк итеп башҡара.

Һәләтле кешеләрҙең яҙмышы күп осраҡта йә фажиғәле, йә бәхетһеҙ, йә ҡыҫҡа, йә аяуһыҙ. Камил ағай үҙе нур, көс, кәйеф, маҡсат, ынтылыш, аҡыл биреүсе оло бер бөйөк ҡая ине. Ғәҙәти тормошто ул шул килеш кенә ҡабул итмәне, шуға ла ауыр саҡтарҙа ысын дуҫтары ташлап китмәне. Бейек тауҙарҙағы ҡаяны һәр саҡ ел-буран, әсе һалҡындар, ҡурма эҫеләр, йәшен уты ла, ҡояш нуры ла ашай. Ә ул бирешмәй.

Ҡаяларҙа үҫкән, эй, ҡарағас,
Ыжғыр елдәргә лә бирешмәй.

Уға ҡарап йәштәр үҫте һәм үҫә. Йәм-йәшел теркеләрҙең үҫеп, ҡеүәтле ҡарағас булып китеүҙәре алда әле. Йырҙарҙа йырланғанса:

Ҡарағасҡа ҡарап терке үҫә,
Ғилемлегә ҡарап аң үҫә.